МУНИЦИПАЛЬ МӘКТӘПКӘСӘ БЕЛЕМ БИРЕҮ БЮДЖЕТ УЧРЕЖДЕНИЕҺЫ
БАЛА ҮҪТЕРЕҮ ҮҘӘГЕ – “АҠБУҘАТ” БАЛАЛАР БАҠСАҺЫ

## Ата-әсәләр өсөн консультация

# Балалыҡ ҡурҡыуы
# һәм уларҙы үткәреп ебәреү.

**“Бапаҡ”тарҙан ҡотолабыҙ: балалыҡ ҡурҡыуы**

**һәм уларҙы үткәреп ебәреү.**

Һеҙҙең балағыҙ бапаҡтарҙан (ҡурҡыныс йән эйәләренән), әкиәт персонаждарынан һәм ҡараңғылыҡтан ҡурҡамы? Һеҙҙе тынысландырырға ашығабыҙ – һеҙҙә генә түгел был. Психологтар әйтеүенсә был ғәҙәти күренеш, сөнки был осорҙа бала үҫешә һәм йәмғиәткә яраҡлаша.

Әммә ҡайһы саҡ ғәҙәти хәлдән патологияға бер генә аҙым ҡала. Бала саҡта барлыҡҡа килгән фобияның төп сәбәбе низә һуң? Баланың был проблемаһын нисек белергә? Бөгөн беҙ бала саҡ ҡурҡыуҙары менән нисек көрәшергә, уларҙың төрҙәре һәм йәш үҙенсәлектәре тураһында һөйләшәсәкбеҙ.

Бер ҡасан да бер нимәнән дә ҡурҡмаған кешене табыуы ауыр. Хәүефләнеү, ҡурҡыу кеүек эмоциялар кешенең ҡайғырыу, йән көйөү, ҡыуаныу, ҡәнәғәтлек кисереү кеүек хистәре айырылғыһыҙ. Балаға ла нимәнәндер ҡурҡыу хас. Ҡайһы бер ҡурҡыу йәш үтеү менән эҙһеҙ юҡҡа сыҡһа ла, ҡайһылары оло тормошҡа ҙур бәлә булып күсергә мөмкин (әгәр ата-әсәнең дөрөҫ хәл итә белмәһә).

**Бала саҡ ҡурҡыуҙарының барлыҡҡа килеү сәбәптәре.**

Психолог Александр Захаров үҙенең күренекле “Балаларҙа көндөҙгө һәм төнгө ҡурҡыуҙары” тигән хеҙмәтендә, бала үҙенең йәшәй башлаған осоронда (бәләкәй сағында) әле фекерҙәрен бер епкә теҙә белмәй, шуға күрә ата-әсәһенә ышана, уларҙың төрлө хәлгә ҡарашын үҙенә күсерә тип әйтеп үтә.

Ғәжәп түгел, балаларҙың күп кенә ҡурҡыуҙарының сәбәпсеһе туғандары үҙҙәре үк булып тора, ниндәйҙер хәүеф янағанын артыҡ эмоциялар менән еткерәләр (“Теймә, яндыраһың!”, “Йүгермә, ҡолайһың!”) йә ҡурҡытырға тырышалар (“Тыңламаһаң, полицейский ағайға бирәм!).

Әйткәндәй, балаға был осраҡ түгел, ә өлкәндәрҙең артыҡ ҡурсалауы ҡурҡыта. Балаларға әсә тауышындағы ҡаушаулы һәм ҡурҡыулы ноталар тәьҫир итә.

**Мәктәпкәсә йәштәге балаларҙың ҡурҡыуын булдырған башҡа сәбәптәр араһында, психологтар түбәндәген билдәләй:**

- Билдәле осраҡ, баланы ҡурҡытҡан билдәле осраҡ (уны эт тешләгән, лифта тороп ҡалған, юл йөрөү хәүефенә эләккән). Ҡурҡаҡ, үҙ—ҙенә ышаныусан балала ла был ҡурҡыуҙар тороп ҡала.
- Баланың күҙ алдына килтереүе, арҡаһында ул үҙенә ҡараңғылыҡта бапаҡтар, кровать а:тында албаҫтылар һәм тәҙрә аша ендәр уйлап таба. Ҡайһы бер балалар шунда уҡ онота, ә ҡайһылары яңғыҙ ҡалырға ҡырҡа баш тарталар.
- өйҙәгеләрҙең йыш талашыуы, өй эсендәге негатив торош, психологик ярҙамдың булмауы балала, ваҡыт үтеү менән был ҡурҡыуға әүерелә.
- Йәштәштәр араһындағы аралашыу ҙа социаль фобия сәбәбе булып тора. Коллективта кәмһетеүгә, көлкө хәлгә ҡалыуҙан мәктәпкә, балалар баҡсаһына йөрөүҙән ҡырҡа баш тартҡан осраҡтар һирәк түгел.
- Етди мәсьәлә булып – невроз тора. Баланың йәшенә үҙенсәлекле булмаған, йә йәшенә тап килгән, әммә потологик күренеш алған ҡурҡыуҙар невроз билдәләре.

Баланың фобиялары һаны артыуына булышлыҡ иткән киләһе **факторҙар:**

- Яҡындарының артыҡ хәүефле булыуы, уларҙа ҡурҡыу булыуы.
- Авторитар тәрбиә, баланы артыҡ тыйып үҫтереү.
- Баланың яңғыҙлығы – ғаиләлә яңғыҙ балала ҡурҡыу барлыҡҡа килә.

- Әсәһенең иртә эшкә сығыуы, ҡатын-ҡыҙҙың физик һәм нервы арыуы.
- Артыҡ ҡайғыртыу.
- Тулы булмаған ғаилә.
- Күреүебеҙсә, күп ҡурҡыуҙар ата-әсәләрҙең үҙҙәрен дөрөҫ тотмауынан, иғтибар етмәүҙән, йә киреһенсә артыҡ иғтибарҙан барлыҡҡа килә. Балағыҙҙың фобияһын еңәбеҙ тиһәгеҙ быны иҫәпкә алыр кәрәк.

**Балалар ҡурҡыуының төрҙәре.**

Белгестәр төп дүрт төрҙө билдәләйҙәр. Был класисификация нигеҙендә бер нисә характеристика ята: ҡурҡыу предметы, уның барлыҡҡа килеүе сәбәптәре, үҙенсәлектәре, күпме барғанлыҡты күҙ уңында тотола.

1. Нимәгәлер бәйле ҡурҡыу. Айырым осраҡта барлыҡҡа килә. Мәҫәлән, бейеклектән ҡурҡыу (акрофобия).
2. Алмашаланыусан ҡурҡыу. Был ауырыраҡ күренеш. мәҫәлән, бала зонтты асырға ҡурҡа, булмаһа бер конкрет кейемде кейергә ҡурҡа, йә иһә уйынсыҡтан ҡурҡа. Былырҙың барлыҡҡа килеүе сәбәбен табыуы ҡыйын.
3. Үтә ҡиммәтле ҡурҡыу. Был ҡурҡыу төрҙәре киң таралған, күп балаларҙа осрай. Яңғыҙ ҡалырға ҡурҡыу, ҡараңғылыҡтан ҡурҡыу.
4. Төнгө ҡурҡыуҙар. Йоҡлағанда күп кенә балалар һаташырға мөмкин. Таңға улар үҙҙәренең ҡурҡыуҙарын хәтерләмәйҙәр.

**Бала ҡурҡыуын диагностикалау.**

Балағыҙҙың ҡурҡыуын еңер алдынан, уларҙың ниҙән барлыҡҡа килгәнен асыҡлар кәрәк. Иртә йәштә психологик диагностика үткәреүҙең төп ауырлығы – баланың үҙен борсоған нимәләрҙе һөйләй белмәүендә. Шуға күрә балаға ҡәҙимге эш төрөн ҡулланыр кәрәк.

1. Һүрәт төшөрөү. Асыҡлауҙа төҫтәргә, һүрәттең урынлашыуына, һүрәттең асыҡлығына ҡарап билдәләп була.

2. Балаға үҙенең ятаҡкан әкиәт геройы тураһында әкиәт уйларға ҡушыу (күп саҡ балалар үҙҙәре тураһында һөйләй). Был ысулды ҫ йәштән ҡулланырға була.

3. Тағы бер вариант – әңгәмә. Быны 4 йәштән башлап ҡулланырға була. Ипле генә һорауҙар бирер кәрәк. Нимәнән ҡурҡа?.